Документ подписан простой электронной подписью
Информация о владельце:
ФИО: Сыров Игорь Анатольевич
Должность: Директор
Дата подписания: 31.10.2023 17:02:42
Уникальный программный ключ:
b683afe664d7e9f64175886cf9626a198149ad36

СТЕРЛИТАМАКСКИЙ ФИЛИАЛ
ФЕДЕРАЛЬНОГО ГОСУДАРСТВЕННОГО БЮДЖЕТНОГО ОБРАЗОВАТЕЛЬНОГО
УЧРЕЖДЕНИЯ ВЫСШЕГО ОБРАЗОВАНИЯ
«УФИМСКИЙ УНИВЕРСИТЕТ НАУКИ И ТЕХНОЛОГИЙ»

Факультет ***Башкирской и тюркской филологии***
Кафедра ***Башкирской филологии***

**Аннотация рабочей программы дисциплины (модуля)**

дисциплина ***Б1.О.19 Современный башкирский язык***

обязательная часть

Направление

***44.03.05*** ***Педагогическое образование (с двумя профилями подготовки)***
код наименование направления

Программа

***Родной (башкирский) язык и литература, Русский язык***

Форма обучения

**Заочная**

Для поступивших на обучение в
**2023 г.**

Стерлитамак 2023

**1. Перечень планируемых результатов обучения по дисциплине, соотнесенных с установленными в образовательной программе индикаторами достижения компетенций**

| Формируемая компетенция (с указанием кода) | Код и наименование индикатора достижения компетенции | Результаты обучения по дисциплине (модулю) |
|---|---|---|
| ПК-1. Способен использовать теоретические и практические знания для постановки и решения исследовательских задач в предметной области и в области образования | ПК-1.1. Знает о знаково-символической природе и генезисе языковых и литературных явлений, факторах их исторического развития для объяснения актуальных проблем и тенденций развития языка и литературы | Обучающийся должен:<br>Знать фундаментальные понятия, отчетливо представлять специфику дисциплины, знать основные языковые единицы на фонетическом, лексическом, морфологическом, синтаксическом уровне и правила их функционирования, знать современную теорию и важнейшие вопросы в области современного башкирского языка. |
| | ПК-1.2. Умеет интерпретировать лингвистические, историко-литературные, культурно-мировоззренческие явления и процессы в контексте общей динамики развития языка и литературы с учетом их использования для решения исследовательских задач | Обучающийся должен:<br>Уметь использовать систематизированные теоретические и практические знания для постановки и решения исследовательских задач в области изучаемой дисциплины, в области образования. |
| | ПК-1.3. Владеет навыками комплексного поиска, анализа и систематизации информации по изучаемым проблемам языка и литературы с использованием научных и текстовых источников, научной и учебной литературы, информационных баз данных | Обучающийся должен:<br>Владеть навыками комплексного поиска, анализа, систематизации информации и написания научно-исследовательской работы по изучаемым проблемам современного башкирского языка с использованием научных и текстовых источников, научной и учебной литературы, информационных баз данных. |

**2. Цели и место дисциплины (модуля) в структуре образовательной программы**

Цели изучения дисциплины:

1. Формирование у студентов знаний в области башкирского языка и навыков анализа языковых явлений, развитие лингвистического мышления, совершенствование оперативной памяти и навыков связной речи;
2. Дать знание основных концептуально важных положений в области теории основного изучаемого языка с целью применения полученных знаний в научно-

исследовательской и практически-прикладной деятельности,
3. Укрепить мотивацию самостоятельного изучения и дальнейшего совершенствования изучения башкирского языка;
4. Развивать лингвистическое чутье и повысить речевую культуру.
Дисциплина «Современный башкирский язык» относится к обязательной части.

Дисциплина изучается на 1, 2, 3, 4, 5, 6 курсах в 2, 3, 4, 5, 6, 7, 8, 9, 10, 11, 12 семестрах

## 3. Объем дисциплины (модуля) в зачетных единицах с указанием количества академических или астрономических часов, выделенных на контактную работу обучающихся с преподавателем (по видам учебных занятий) и на самостоятельную работу обучающихся

Общая трудоемкость (объем) дисциплины составляет 900 акад. ч.

| **Объем дисциплины** | **Всего часов** |
|---|---|
| | **Заочная форма обучения** |
| Общая трудоемкость дисциплины | 900 |
| Учебных часов на контактную работу с преподавателем: | |
| лекций | 66 |
| практических (семинарских) | 104 |
| другие формы контактной работы (ФКР) | 7,2 |
| Учебных часов на контроль (включая часы подготовки): | 34,3 |
| экзамен | |
| зачет | |
| курсовая работа | |
| Учебных часов на самостоятельную работу обучающихся (СР): | 688,5 |
| курсовая работа | |

| **Формы контроля** | **Семестры** |
|---|---|
| экзамен | 3, 5, 12 |
| зачет | 4, 8, 10 |
| курсовая работа | 4 |

## 4. Содержание дисциплины (модуля), структурированное по темам (разделам) с указанием отведенного на них количества академических часов и видов учебных занятий

### 4.1. Разделы дисциплины и трудоемкость по видам учебных занятий (в академических часах)

| **№ п/п** | **Наименование раздела / темы дисциплины** | **Виды учебных занятий, включая самостоятельную работу обучающихся и трудоемкость (в часах)** | | | |
|---|---|---|---|---|---|
| | | **Контактная работа с преподавателем** | | | **СР** |
| | | **Лек** | **Пр/Сем** | **Лаб** | |
| **1** | **Фонетика и фонология. Лексикология современного башкирского литературного** | **16** | **20** | **0** | **238** |

| | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|
| | **языка. Фразеология и лексикография современного башкирского языка** | | | | |
| 1.1 | Фонетика и фонология современного башкирского языка. Цель и задачи курса, предмет изучения. Речевой аппарат. Артикуляция звуков башкирского языка | 1 | 1 | 0 | 17 |
| 1.2 | Вокализм. Классификация гласных фонем. Явление сингармонизма в башкирском языке | 1 | 1 | 0 | 17 |
| 1.3 | Консонантизм. Классификация согласных фонем | 1 | 1 | 0 | 17 |
| 1.4 | Фонетические изменения в потоке речи: позиционнные и комбинаторные | 1 | 1 | 0 | 17 |
| 1.5 | Система слога в башкирском языке. Словесное ударение Транскрипция. Частотность гласных фонем Частотность согласных фонем | 1 | 1 | 0 | 17 |
| 1.6 | Орфография и орфоэпия современного башкирского языка. Из истории письма | 1 | 1 | 0 | 17 |
| 1.7 | Введение. Современный башкирский язык; башкирский язык среди родственных языков; башкирский язык и ностратика. Классификация тюркских языков | 1 | 1 | 0 | 17 |
| 1.8 | Башкирская лексикология (семасиология) как наука, ее разделы. Структура башкирского слова: экспонент (форма) и значение. Структура лексического значения слова; сема как минимальный компонент значения слова. | 2 | 2 | 0 | 17 |
| 1.9 | Парадигматические отношения в баш. Лексике (семасиологии). Омонимия. Синонимика, синонимия и синонимы. Варианты слова, паронимы и эвфемизмы в башкирском языке. Антонимия. | 1 | 1 | 0 | 17 |
| 1.10 | Башкирская лексика с точки зрения ее происхождения | 2 | 2 | 0 | 17 |
| 1.11 | Социально-функциональная характеристика башкирской лексики. Активная и пассивная лексика | 1 | 2 | 0 | 17 |
| 1.12 | Функционально-стилевая и стилистическая характеристика башкирской лексики. | 1 | 2 | 0 | 17 |
| 1.13 | Фразеология башкирского языка. Историческое формирование и развитие башкирской фразеологии. | 1 | 2 | 0 | 17 |
| 1.14 | Лексикография. Башкирская лексикография как наука о теории и практике составления словарей. Многотомный академический толковый словарь башкирского языка. | 1 | 2 | 0 | 17 |
| **2** | **Морфология** | **18** | **36** | **0** | **153** |
| 2.1 | Введение. Общее понятие о морфологии. Части речи. Самостоятельные и служебные части речи. | 2 | 4 | 0 | 17 |
| 2.2 | Имя существительное. Разряды существительных по значению. Собственные | 2 | 4 | 0 | 17 |

| | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|
| | и нарицательные имена существительные. Род, число, падеж. Синтаксическая роль в предложении. | | | | |
| 2.3 | Имя прилагательное. Разряды прилагательных по значению. Степени прилагательных. Синтаксическая роль в предложении. | 2 | 4 | 0 | 17 |
| 2.4 | Имя числительное. Разряды числительных по значению. Разряды числительных по структуре. Синтаксическая роль в предложении. Нумеративные слова. | 2 | 4 | 0 | 17 |
| 2.5 | Местоимение. Разряды местоимений по значению | 2 | 4 | 0 | 17 |
| 2.6 | Наречие. Разряды числительных по значению. Степени наречий. Синтаксическая роль в предложении. | 2 | 4 | 0 | 17 |
| 2.7 | Глагол. Разряды глаголов по значению. Инфинитив. Переходность и непереходность. Наклонение. Время. Лицо. Число. Синтаксическая роль в предложении. | 2 | 4 | 0 | 17 |
| 2.8 | Служебные части речи. Предлог. Союз. Частица. | 2 | 4 | 0 | 17 |
| 2.9 | Модальные слова. Междометие. | 2 | 4 | 0 | 17 |
| **3** | **Синтаксис простого предложения** | **14** | **22** | **0** | **188** |
| 3.1 | Введение. Понятие синтаксиса. Основные единицы синтаксиса | 1 | 1 | 0 | 18 |
| 3.2 | Словосочетание и предложение | 1 | 2 | 0 | 16 |
| 3.3 | Основные признаки предложения | 1 | 1 | 0 | 16 |
| 3.4 | Функционально-коммуникативные и эмоциональные типы предложений | 2 | 2 | 0 | 16 |
| 3.5 | Главные  члены предложения | 1 | 2 | 0 | 16 |
| 3.6 | Односоставные предложения | 1 | 2 | 0 | 16 |
| 3.7 | Второстепенные члены предложения | 1 | 2 | 0 | 16 |
| 3.8 | Осложненные простые предложения | 2 | 2 | 0 | 16 |
| 3.9 | Обособленные второстепенные члены предложения | 1 | 2 | 0 | 13 |
| 3.10 | Порядок слов в предложении | 1 | 2 | 0 | 14 |
| 3.11 | Слова, словосочетания и предложения, грамматически не связанные с членами предложения | 1 | 2 | 0 | 15 |
| 3.12 | Простые предложения, осложненные вставочными конструкциями | 1 | 2 | 0 | 16 |
| **4** | **Синтаксис сложного предложения** | **18** | **26** | **0** | **108** |
| 4.1 | Сложные предложения в башкирском  языке, история их изучения | 2 | 2 | 0 | 16 |
| 4.2 | Сложносочинённые предложения. Союзные и бессоюзные сложносочинённые предложения, постановка знаков препинания. | 2 | 4 | 0 | 14 |
| 4.3 | Сложноподчинённые предложения, их особенности | 2 | 4 | 0 | 15 |
| 4.4 | Сложные синтаксические конструкции. | 4 | 4 | 0 | 16 |
| 4.5 | Структура и грамматические особенности | 2 | 4 | 0 | 16 |

| | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|
| | чужой речи. | | | | |
| 4.6 | Синтаксис текста. Виды текста. | 4 | 4 | 0 | 16 |
| 4.7 | Пунктуация. Разделительные и обособляющие знаки препинания, их функции | 2 | 4 | 0 | 15 |
| | **Итого** | **66** | **104** | **0** | **687** |

**4.2. Содержание дисциплины, структурированное по разделам (темам)**

Курс лекционных занятий

| № | Наименование раздела / темы дисциплины | Содержание |
|---|---|---|
| **1** | **Фонетика и фонология. Лексикология современного башкирского литературного языка. Фразеология и лексикография современного башкирского языка** | |
| 1.1 | Фонетика и фонология современного башкирского языка. Цель и задачи курса, предмет изучения. Речевой аппарат. Артикуляция звуков башкирского языка | Фонетика – тел ғилеменең телмәр өндәре тураһындағы бүлеге. Фонетиканың төрҙәре: дөйөм фонетика (тел ғилемендә телмәр өндәренең яһалышын, баҫымын, ижек төҙөлөшөн һәм башҡа мәсьәләләрҙе төрлө телдәрҙән алынған мате¬риал нигеҙендә өйрәнә торған бүлеге), тарихи фонетика (тел ғилеменең өндәр төҙөлөшөн уның тарихи үҫешендә өйрәнә торған бүлеге), тасуири фонетика (тел ғилеменең конкрет бер телдәге өндәр төҙөлөшөн синхрон планда өйрәнә торған бүлеге), сағыштырма фонетика (ҡәрҙәш телдәрҙең өндәр системаһын өйрәнә торған бүлек), сағыштырма-типологик йәки оҡшаштырма фонетика (ҡәрҙәш булмаған телдәрҙең өндәр системаһын өйрәнә торған бүлек), эксперименталь фонетика (тел ғилеменең телмәр өндәрен инструменталь метод ярҙамында өйрәнә торған бүлеге). Башҡорт теленең фонетик системаһын өйрәнеү тарихынан. Телсе-ғалимдар Н.К. Дмитриевтың, Ҡ.З. Әхмәровтың, Ә.Ә. Юлдашевтың, Ж.Ғ. Кейекбаевтың, Н.Х. Ишбулатовтың, Э.Ф. Ишбирҙиндың, Р.Ғ. Аҙнағоловтың, К.Ғ. Ишбаевтың һ.б. ғалимдарҙың башҡорт теленең фонетикаһын өйрәнеүгә арналған хеҙмәттәре. Телмәр өндәренең акустик (физик), артикуляцион һәм функциональ яҡтары. Акустик фонетика – телмәр өндәренең физик үҙенсәлектәрен (өндөң юғарылығы, көсө, оҙонлоғо, тембры) өйрәнеүсе бүлек. Артикуляцион фонетика – телмәр өндәренең яһалыу рәүешен өйрәнеүсе бүлек. Киң һәм тар мәғәнәлә телмәр аппаратының эшмәкәрлеге. Актив һәм пассив телмәр |

| | | |
|---|---|---|
| | | ағзалары.<br>Функциональ фонетика (фонология) – телмәр өндәренең аралашыу процесындағы лингвистик функцияһын өйрәнгән бүлек. Телмәр өндәренең функциональ билдәләре. Фонологияның төп берәмеге – фонема – һүҙҙәрҙең һәм морфемаларҙың тышҡы формаһын барлыҡҡа килтереүсе һәм уларҙың мәғәнәһенайыра торған иң ҡыҫҡа, йәғниминималь, өн берәмеге. Телмәр өндәре һәм фонема.<br>Фоносемантика. Телмәр өндәренең семантик билдәләре. |
| 1.2 | Вокализм. Классификация гласных фонем. Явление сингармонизма в башкирском языке | Һуҙынҡы һәм тартынҡы өндәрҙең акустик, артикуляцион һәм функциональ яҡтан айырмалыҡтары.<br>Вокализм. Һуҙынҡы өндәрҙең физиологик, акустик, семантик үҙенсәлектәре. Һуҙынҡы өндәрҙе төркөмләү принциптары: рәт (телдең горизонталь торошо), күтәрелеш (телдең вертикаль торошо), лабиализация (ирендәрҙең ҡатнашлығы), назализация (танау ҡыуышлығы ҡатнашлығы), оҙонлоҡ (һуҙынҡыларҙың әйтелеш оҙонлоғо). Төп башҡорт һүҙҙәрендә һуҙынҡылар. Һуҙынҡы өндәрҙең варианттары (аллофондар). Үҙләштерелгән һүҙҙәрҙә һуҙынҡы өндәр. Хәҙерге башҡорт теленең һуҙынҡы өндәрен тасуирлау, уларҙы башҡорт алфавитындағы хәрефтәр менән биреү үҙенсәлектәре. Башҡорт телендә дифтонгылар мәсьәләһе. Профессор Н.К. Дмитриевтың, Ж.Ғ. Кейекбаевтың был мәсьәләгә ҡарашы. Төп (ысын) дифтонгылар һәм ялған дифтонгылар. |
| 1.3 | Консонантизм. Классификация согласных фонем | Консонантизм. Тартынҡы өндәрҙең артикуляцияһы. Төп башҡорт һүҙҙәрендә ҡулланылған тартынҡы өндәр. Сит телдәрҙән үҙләштерелгән һүҙҙәр аша килеп ингән тартынҡы өндәр.<br>Хәҙерге башҡорт теленең тартынҡы өндәрен төркөмләү принциптары: тауыш һәм шау ҡатнашлығы буйынса (яңғырау, һаңғырау, талғын йәки сонор), артикуляция рәүеше (шартлаулы, ышҡыулы (фрикатив йәки ек), ҡуш йәки аффрикаттар, танау, тел эргәһе, ҡалтыраулы йәки вибрант) һәм артикуляция урыны (ирен (ике ирен, ирен-теш), тел (тел алды, тел уртаһы, тел арты), тамаҡ йәки фарингаль, тамаҡ төбө) буйынса. |

| | | |
|---|---|---|
| | | Тартынҡы өндәрҙең варианттары (аллофондар). |
| 1.4 | Фонетические изменения в потоке речи: позиционнные и комбинаторные | төрлө фонетик күренештәр барлыҡҡа килә: позицион һәм комбинаторлы үҙгәрештәр. Редукция күренеше, уның тулы һәм тулы булмаған төрҙәре. Элизия, уның барлыҡҡа килеү шарттары. Башҡорт телендә протеза, эпентеза, эпитеза күренештәре. Тартынҡыларҙың ассимиляцияһы. Прогрессив йәки ыңғай, регрессив йәки кире ассимиляция. Тулы һәм тулы булмаған ассимиляция. Контактлы һәм контактһыҙ ассимиляция. Диссимиляция күренеше. Өндәрҙең сиратлашыуы. Башҡорт һөйләштәрендә метатеза, диереза, гаплология күренештәре.<br>Башҡорт телендә сингармонизм законы. Аңҡау гармонияһы. Ирен гармонияһы. Лабиализация һәм делабиализация. Һуҙынҡы һәм тартынҡы өндәрҙең ярашыуы. Сингармоник параллелизм. Сингармоник варианттарҙың барлыҡҡа килеү сәбәптәре. Һүҙҙәрҙең һәм аффикстарҙың фонетик варианттары. Аффикстарҙың фонетик структураһы. |
| 1.5 | Система слога в башкирском языке. Словесное ударение Транскрипция. Частотность гласных фонем Частотность согласных фонем | Фонетик яҡтан телмәр ағышының өлөштәре: фраза, синтагма, такт, һүҙ, ижек, өн.<br>Ижек – һүҙҙең бүленмәй, бер тын менән әйтелә торған быуыны. Төрлө телдәрҙә ижек ҡалыптары. Ижек яһай алыусы һәм ижек яһай алмаусы өндәр. Башҡорт һүҙҙәрендә ижек ҡалыптары. Үҙләштерелгән һүҙҙәрҙә ижек ҡалыптары. Ижек төрҙәре: асыҡ һәм ябыҡ, ҡапланған һәм ҡапланмаған, баҫымлы һәм баҫымһыҙ ижек. Башҡорт телендә һүҙҙе ижектәргә бүлеү үҙенсәлектәре, уның орфографияға мөнәсәбәте. Башҡорт һүҙҙәрендә ижектәрҙә һуҙынҡыларҙың килеү тәртибе.<br>Акцентология – баҫым тураһындағы фән. Баҫым – һүҙҙәге бер ижектең йәки һөйләмдәге бер һүҙҙең башҡаларға ҡарағанда көслөрәк әйтелеше. Башҡорт телендә баҫым системаһы. Баҫым төрҙәре: экспираторлы йәки динамик баҫым, музыкаль-тоник, квантитатив баҫым, эмфатик баҫым.<br>Башҡорт һүҙҙәрендә баҫым. Төп һәм өҫтәлмә баҫым. Төрлө дәрәжәләге баҫым. |

| | | |
|---|---|---|
| | | Энклитика һәм проклитика. Баҫым беренсе ижеккә төшкән һүҙҙәр. Баҫым төшмәй торған аффикстар.<br>Үҙләштерелгән һүҙҙәрҙә баҫым.<br>Һүҙ баҫымы. Такт баҫымы. Фраза баҫымы. Логик баҫым. |
| 1.6 | Орфография и орфоэпия современного башкирского языка. Из истории письма | Орфоэпия тураһында төшөнсә. Хәҙерге башҡорт әҙәби теленең орфоэпик нормалары. Һуҙынҡы өндәрҙең дөрөҫ әйтелеше. Орфоэпияла редукция һәм тулы өнләлөк. Орфоэпик ижек бүленеше. Дифтонгоидтарҙың дөрөҫ әйтелеше. Тартынҡы өндәрҙең дөрөҫ әйтелеше. Б, в, п, н, к, ҡ хәрефтәре менән белдерелгән өндәрҙең төрлө позицияла дөрөҫ әйтелеш үҙенсәлектәре. Урыҫ һәм башҡа сит телдәрҙән килеп ингән һүҙҙәрҙен, әйтелеш үҙенсәлектәре.<br>Орфоэпияның орфографияға бәйләнеше. Орфография тураһында төшөнсә. Орфография принциптары (фонетик йәки фонологик, морфологик йәки морфематик, график, тарихи йәки тарихи-традицион, дифференциаль). Башҡорт орфографияһы нигеҙләнгән принциптар. Башҡорт әҙәби теленең орфография һүҙлектәре.<br>Хәҙерге башҡорт әҙәби теленең орфографик нормалары. Һуҙынҡы һәм тартынҡыларҙың яҙылышындағы үҙенсәлектәр. Ҙур һәм бәләкәй хәрефтәр ҡулланыу. Э, е, ё, ю, я, й, ь, ъ хәрефтәренең дөрөҫ яҙылышы. Айырым һүҙҙәрҙең, аффикстарҙың һәм киҫәксәләрҙең яҙылышы. Һүҙҙәрҙең айырым, бергә, дефис һәм һыҙыҡ аша яҙылыуы. Ғәрәп һәм фарсы теленән үҙләштерелгән һүҙҙәрҙең дөрөҫ яҙлышы. Урыҫ теленән һәм урыҫ теле аша башҡа телдәрҙән үҙләштерелгән Һүҙҙәрҙәге аффикстарҙың дөрөҫ яҙылышы. Һүҙҙәрҙе юлдан юлға күсереү. Һүҙҙәрҙең баш хәреф менән яҙылышы. Һүҙҙәрҙе график ҡыҫҡартыу. |
| 1.7 | Введение. Современный башкирский язык; башкирский язык среди родственных языков; башкирский язык и ностратика. Классификация тюркских языков | Тел ғилеменең тармағы (фән) һәм уҡыу-уҡытыу предметы буларак «Хәҙерге башҡорт теле», был курстың состав өлөштәре һәм үҙенсәлектәре. Башҡорт донъяһының (тормошоноң), менталитетының коды буларак башҡорт теле. |
| 1.8 | Башкирская лексикология (семасиология) как наука, ее разделы. | Башҡорт һүҙенең телдең нигеҙ ташы, «төҙөлөш материалы», берәмек булыуы, |

| | | |
|---|---|---|
| | Структура башкирского слова: экспонент (форма) и значение. Структура лексического значения слова; сема как минимальный компонент значения слова. | унының тәбиғәте, вазифаһы һәм билдәләүҙәре. Һүҙ тәбиғәтенең ике (тышҡы һәм эске) яҡлы булыуы. Башҡорт һүҙҙәренең семантик структураһы (эпидигматика): бер мәғәнәлек, күп мәғәнәлек; тура һәм күсмә мәғәнәлек, күп һәм күсмә мәғәнәлектең төрҙәре (метафора, метонимия, синекдоха һәм функциональ күсеш). Һүҙҙең мәғәнәһе һәм төшөнсә атай алыу һәләтлеге. Төшөнсә тип ысынбарлыҡтағы күренештәргә, предметтарға хас булған төп билдәләрҙең кеше аңында сағылыш алыуы. |
| 1.9 | Парадигматические отношения в баш. Лексике (семасиологии). Омонимия. Синонимика, синонимия и синонимы. Варианты слова, паронимы и эвфемизмы в башкирском языке. Антонимия. | Башҡорт теленең лексик-семантик системаһында парадиг¬матика. Омонимик парадигма (ОП); омонимдарға оҡшаған тел (телмәр) күренештәре. Синонимик парадигма (СП); синонимдар һүҙлектәре һәм уларҙың төҙөлөшө.<br>Антонимик парадигма (АП); тел һәм телмәр антонимдары мәсьәләһе; антонимдар һүҙлектәренең төҙөлөү принциптары. |
| 1.10 | Башкирская лексика с точки зрения ее происхождения | Башҡорт лексикаһында иң боронғо ҡатлам һүҙҙәр. Төп башҡорт һүҙҙәре тип был телдең иң боронғо мираҫ, шул уҡ ваҡытта мәңге йәш һүҙҙәре аталыу. Боронғо төрки һәм хәҙерге башҡорт, башҡорт һәм хәҙерге төрки, башҡорт һәм алтай (төрки, монгол һәм тунгус-маньчжур), башҡорт һәм урал-алтай телдәренең лексик параллелдәренең төп башҡорт һүҙҙәренең сығанактары булыуы. Башҡорт теленең үҙ һүҙҙәре мәсьәләһе.<br>Башҡорт теленең һүҙлек составында ориентализмдар: фарсы сығанаҡлы һүҙҙәр; ғәрәбизмдар; санскрит, ҡытай һ.б. көнсығыш телдәрҙән үҙләштермәләр.<br>Башҡорт лексикаһында төп рус (урыҫ) һүҙҙәре, рус теленең үҙ һүҙҙәре ҡатламы.<br>Рус теле аша бүтән (көнбайыш, Көнбайыш Европаның классик һәм яңы) телдәрҙән килеп ингән һүҙҙәр. |
| 1.11 | Социально-функциональная характеристика башкирской лексики. Активная и пассивная лексика | Актив һәм пассив ҡулланылыш йәһәтенән башҡорт лексикаһы: иҫкергән (архаизм һәм историзмдар) һәм яңы һүҙҙәр (неологизмдар), уларҙың төрҙәре һәм ҡулланылыш үҙенсәлектәре, иҫке менән яңының мөнәсәбәттәшлеге.<br>Ҡулланылыш өлкәһе (сфераһы) буйынса башҡорт лексикаһы; дөйөм ҡулланылышлы һәм ҡулланылышы сикләнгән һүҙҙәр |

| | | |
|---|---|---|
| | | ҡатламдары. Һуңғы ҡатламдың диалекталь лексиканан, махсус (профессиональ һәм терминологик) лексиканан ойошоуы. Диалект лексикаһы (диалекталь лексика, диалектизмдар) һәм уларҙың төрҙәре. Махсус (профессиональ һәм терминологик) лексика |
| 1.12 | Функционально-стилевая и стилистическая характеристика башкирской лексики. | Лексик стилистика һәм синонимика. Лексикографик хеҙмәттәрҙә стили-стик биҙәктәрҙе һәм стиль төрҙәрен билдәләү. |
| 1.13 | Фразеология башкирского языка. Историческое формирование и развитие башкирской фразеологии. | Фразеологик берәмектәр (фразеологизмдар), уларҙың төп билдәләре; һүҙ (лексема) һәм фразеологизм; ирекле (синтаксик) һүҙбәйләнеш һәм тотороҡло (фразеологик) һүҙбәйләнеш; фразеологизм менән мәҡәлдәр һәм әйтемдәр һ.б. |
| 1.14 | Лексикография. Башкирская лексикография как наука о теории и практике составления  словарей. Многотомный академический толковый словарь башкирского языка. | Һүҙлектәр һәм уларҙың төрҙәре; практик (ғәмәли) һәм теоретик лексикография мәсьәләләре. |
| **2** | **Морфология** | |
| 2.1 | Введение. Общее понятие о морфологии. Части речи. Самостоятельные и служебные части речи. | Һүҙ төркөмдәрен һәм уларҙың грамматик категорияларын өйрәнеүсе фән булараҡ морфология. Морфологияның тел ғилеменең башҡа бүлектәренә мөнәсәбәте, тикшереү объекты. Һүҙ төркөмдәре. Һүҙҙәрҙең лексик-грамматик бүленеше. Һүҙ төркөмдәрен айырыу критерийҙары. Һүҙ төркөмдәренә бүлеү принциптары: семантик, морфологик һәм синтаксик принциптар. Бер һүҙ төркөмөнөң икенсе һүҙ төркөмөнә тулыһынса йәки өлөшләтә күсеүе (конверсия). Башҡорт теленең һүҙ төркөмдәре системаһы: үҙ аллы (исем, ҡылым, сифат, һан, алмаш, рәүеш), ярҙамсы һүҙ (теркәүес, бәйләүес, киҫәксә) төркөмдәре, модаль һүҙҙәр, ымлыҡтар, оҡшатыу һүҙҙәре. Һүҙ төркөмдәренең морфологик билдәләре һәм грамматик функциялары. |
| 2.2 | Имя существительное. Разряды существительных по значению. Собственные и нарицательные имена существительные. Род, число, падеж. Синтаксическая роль в предложении. | Исем. Исем тураһында дөйөм төшөнсә. Исемдәрҙең лексик-семантик төркөмсәләре. Конкрет һәм абстракт мәғәнәле исемдәр. Ярҙамсы исемдәр, уларҙың мәғәнә үҙенсәлектәре. Уртаҡлыҡ һәм яңғыҙлыҡ исемдәр, уларҙың дөрөҫ яҙылышы. Исемдең морфологик билдәләре һәм синтаксик функциялары. Башҡорт телендә исемдең төп грамматик категориялары. Һан |

| | | |
|---|---|---|
| | | категорияһы. Унының морфологик һәм синтаксик юл менән бирелеше. Исемдәрҙең эйәлек категориһы. Эйәлек категорияһының зат категорияһы менән тығыҙ бәйләнеше. Эйәлек затының төп мәғәнәһе һәм функцияһы. Эйәлек аффикслы исемдәрҙең килеш менән үҙгәреше. Исемдәрҙең хәбәрлек категорияһы. Хәбәрлек категорияһының мәғәнәһе. Хәбәрлек аффикстарының килеш һәм эйәлек формаларынан һуң бәйләнеп килеүе. Исемдең килеш категорияһы. Килеш формаларының грамматик мәғәнәләре һәм үтәгән функциялары. Башҡорт телендә килештәрҙең мәғәнәләре. Килеш формаларының һөйләмдә ҡулланылыу үҙенсәлектәре: а) төп килештәге яңғыҙлыҡ исемдең төбәү килеш ролен башҡарыуы; б) бер килеш ялғауы урынына икенсеһен ҡулланыу. Башҡорт телендә енес категоряһының лексик юл менән белдерелеүе. Ғәрәп, фарсы һәм рус теленән үҙләштерелгән һүҙҙәрҙә енес формаларының сағылышы. |
| 2.3 | Имя прилагательное. Разряды прилагательных по значению. Степени прилагательных. Синтаксическая роль в предложении. | Сифат. Һүҙ төркөмө булыу яғынан сифат, уларҙың лексик-грамматик мәғәнәләре. Төп һәм шартлы сифаттар, улар араһында мәғәнәүи һәм формаль айырма. Төп сифаттарҙың семантик төркөмсәләре (төҫ, күләм, тәм, характер һ.б.). Шартлы сифаттарҙың мәғәнә үҙенсәлектәре. Төп сифаттарҙың дәрәжәләре: төп, сағыштырыу, артыҡлыҡ, аҙһытыу. Сифаттарҙың лексик һәм синтаксик исемләшеүе. Сифаттың рәүешкә мөнәсәбәте. Уларҙың оҡшаш билдәләре һәм айырмалыҡтары. Сифаттарҙың синтаксик функциялары. Сифаттарҙың стилистик үҙенсәлектәре. Предметтарҙың эске структураһын белдереүсе сифаттарҙың исем менән йәнәшә ҡулланылыуы, ә предметтарҙың тышҡы билдәләрен аңлатыусы сифаттарҙың исемдән алыҫыраҡ бирелеүе. |
| 2.4 | Имя числительное. Разряды числительных по значению. Разряды числительных по структуре. Синтаксическая роль в предложении. Нумеративные слова. | Һан. Һандарҙың лексик-грамматик мәғәнәһе, морфологик билдәләре. Ябай һәм ҡушма һандар. Һан төркөмсәләре: 1. Төп һан. 2. Рәт һандары. 3. Бүлем һандары. 4. Сама һандары. 5. Йыйыу һандары. 6. Кәсер һандары. 7. Үлсәү һандары. Уларҙың яһалышы. Нумератив һүҙҙәр, уларҙың мәғәнә үҙенсәлектәре. Һандарҙың дөрөҫ яҙылышы. Ғәрәп һәм рим цифрҙары менән |

| | | |
|---|---|---|
| | | бирелгән һандарҙа ялғауҙарҙың дөрөҫ яҙылышы. Һандарҙың стилистик үҙенсәлектәре. Һан менән йәнәшә тороусы исемдең берлек һанда килеүе. Ваҡытты яҡынса, сама менән белдергәндә, һандарға күплек аффиксы ҡушылыуы. Һандарҙың исемләшеп килеүе. Исемләшеп килгән һандарҙың килеш менән үҙгәреү үҙенсәлектәре. Нумератив һүҙҙәр. |
| 2.5 | Местоимение. Разряды местоимений по значению | Алмаш. Алмаштарҙың семантик, морфологик билдәләре. Алмаштарҙың үҙ аллы һүҙ төркөмдәренә мөнәсәбәте. Алмаштарҙың лексик-грамматик төркөмсәләре. Зат алмаштары. Күрһәтеү алмаштары. Һорау алмаштары. Билдәләү алмаштары. Билдәһеҙлек алмаштары. Юҡлыҡ алмаштары. Эйәлек алмаштары. Алмаштарҙың һан һәм килеш менән үҙгәреү үҙенсәлектәре. Зат алмаштары менән күрһәтеү алмаштарының билдәле төшөм һәм эйәлек килеш формаһында ғына ҡулланылыуы. Күрһәтеү алмаштарының мәғәнә үҙенсәлектәре. Алмаштарҙың стилистик үҙенсәлектәре. |
| 2.6 | Наречие. Разряды числительных по значению. Степени наречий. Синтаксическая роль в предложении. | Рәүеш. Уның лексик-грамматик мәғәнәләре һәм синтаксик функциялары. Рәүештәрҙең семантик төркөмсәләре: хәл рәүештәре, ваҡыт рәүештәре, урын рәүештәре, оҡшатыу-сағыштырыу рәүештәре, күләм-дәрәжә рәүештәре, сәбәп-маҡсат рәүештәре. Ҡайһы бер рәүештәрҙең дәрәжә менән үҙгәреүе. Урын-ара (пространство) килеш формаларында ныҡынған рәүештәр (үргә, оҙаҡҡа, ситтән, башта, өҫтә). |
| 2.7 | Глагол. Разряды глаголов по значению. Инфинитив. Переходность и непереходность. Наклонение. Время. Лицо. Число. Синтаксическая роль в предложении. | Ҡылым. Ҡылымдарҙың лексик-грамматик мәғәнәһе, морфологик категориялары һәм формалары, синтаксик функциялары. Аңлатҡан мәғәнәләренә ҡарап, ҡылымдарҙың төрлө лексик-семантик төркөмсәләре: хәрәкәт ҡылымдары, эш-хәрәкәт ҡылымдары, хәл-торош ҡылымдары, фекерләү ҡылымдары, телмәр ҡылымдары, күреү ҡылымдары, ишетеү ҡылымдары, оҡшатыу ҡылымдары. Үҙ аллы һәм ярҙамсы ҡылымдар. Үҙ аллы ҡылымдарҙың ярҙамсы ҡылым функцияһында ҡулланылыуы. Ҡылымдарҙың грамматик категориялары: Һөйкәлеш категорияһы. Заман категорияһы. Зат категорияһы. Һан категорияһы. Барлыҡ-юҡлыҡ категорияһы. Күләм (төр) категорияһы. Йүнәлеш категорияһы. |

| | | |
|---|---|---|
| | | Модаллек (рәүешлек) категорияһы. Күсемле һәм күсемһеҙ мәғәнәле ҡылымдар. Зат менән үҙгәреүсе ҡылымдар, зат менән үҙгәрмәй торған ҡылымдар. Бөтә төр грамматик категориялар өсөн уртаҡ грамматик категориялар: барлыҡ/юҡлыҡ, йүнәлеш, күләм категориялары.<br>Ҡылымдың затлы формалары. Затлы форма булыу яғынан һөйкәлеш категорияһы. Ҡылым һөйкәлештәренең һөйләүсе күҙлегенән эш-хәлдең, процестың ысынбарлыҡҡа мөнәсәбәтен белдереүе. Хәҙерге башҡорт телендә ҡылым һөйкәлештәре формалары: 1) хәбәр һөйкәлеше; 2) бойороҡ һөйкәлеше 3) шарт һөйкәлеше; 4) фараз итеү һөйкәлеше; 5) теләк һөйкәлеше; 6) ниәт-маҡсат һөйкәлеше.<br>Ҡылымдың затһыҙ формалары. Затһыҙ форма булыу яғынан ҡылым төркөмсәләре. Хәҙерге башҡорт телендә ҡылым төркөмсәләре: 1) исем ҡылым, 2) уртаҡ ҡылым, 3) сифат ҡылым, 4) хәл ҡылым. |
| 2.8 | Служебные части речи. Предлог. Союз. Частица. | Ярҙамсы һүҙ төркөмдәре. Ярҙамсы һүҙ төркөмдәре тураһында төшөнсә, үҙ аллы һүҙ төркөмдәренән айырмаһы, составы, үҙенсәлектәре.<br>Теркәүестәр. Уларҙың составы, төп башҡорт теленең теркәүестәре һәм үҙләштерелгән теркәүестәр. Теркәүестәрҙең төп функциялары, үҫеше. Теркәүестәрҙең бүленеше: теҙеүсе теркәүестәр һәм эйәртеүсе теркәүестәре. Теркәүестәрҙең төркөмсәләре. Теҙеүсе теркәүестәр: йыйыу, ҡаршы ҡуйыу, бүлеү, аныҡлау теркәүестәре. Эйәртеүсе теркәүестәр: сәбәп, шарт, һөҙөмтә, кирелек, оҡшатыу теркәүестәре.<br>Бәйләүестәр. Бәйләүестәрҙең мәғәнә мөнәсәбәттәре, яһалышы һәм синтаксик функциялары. Уларҙың төркөмдәргә бүленеше. Бәйләүестәрҙең төрлө килештәр менән башҡарылыуы. Бәйләүестәрҙең ярҙамсы исемдәргә ҡарата мөнәсәбәте. Уларҙың стилистик үҙенсәлектәре.<br>Киҫәксәләр. Киҫәксәләрҙең мәғәнә үҙенсәлектәре һәм төрҙәре. Уларҙың һөйләмдәге вазифаһы. Семантик төркөмсәләре: көсәйтеү, раҫлау, сикләү, икеләнеү, һорау, билдәләү, күрһәтеү, сағыштырыу, йөкмәтеү киҫәксәләре. Башҡа ярҙамсы һүҙҙәрҙән айырмаһы. Ҡайһы бер киҫәксәләрҙең теркәүес функцияһында |

| | | |
|---|---|---|
| | | ҡулланылыуы (да, дә һ.б.). Киҫәксәләрҙең дөрөҫ яҙылышы. |
| 2.9 | Модальные слова. Междометие. | Модаль һүҙҙәр. Модаль һүҙҙәрҙең мәғәнәһе, морфологик үҙенсәлектәре. Төп модаль һүҙҙәр һәм инеш модаль һүҙҙәр, уларҙың семантик һәм функциональ яҡтан айырмаһы. Модаль һүҙҙәрҙе мәғәнәләре буйынса төркөмләү: 1) раҫлауҙы, инҡар итеүҙе белдергән модаль һүҙҙәр; 2) кәрәклекте, тейешлекте белдергән модаль һүҙҙәр; 3) мөмкинлекте һәм мөмкин түгеллекте белдергән модаль һүҙҙәр; 4) самалауҙы, икеләнеүҙе, аныҡһыҙлыҡты белдергән модаль һүҙҙәр; 5) иғтибарлылыҡты, өндәшеүҙе белдергән модаль һүҙҙәр. Модаль һүҙҙәрҙең яһалышы һәм дөрөҫ яҙылышы.<br>Ымлыҡтар. Ымлыҡтарҙың семантик һәм грамматик үҙенсәлектәре. Мәғәнә яғынан ымлыҡтарҙың төрҙәре: 1) хис-тойғо (эмоциональ) ымлыҡтар; 2) бойороу-саҡырыу (императив) ымлыҡтары. Ымлыҡтарҙың төҙөлөшө, дөрөҫ яҙылышы һәм улар янында тыныш билдәләре, синтаксик функциялары. Башҡа һүҙ төркөмдәренең ымлыҡ функцияһында ҡулланылыуы.<br>Оҡшатыу һүҙҙәре. Оҡшатыу һүҙҙәренең яһалышы, мәғәнәүи үҙенсәлектәре. Өноҡшаш һәм һыноҡшаш һүҙҙәр, уларҙың составы. Саҡырыу һүҙҙәре. Оҡшатыу һүҙҙәренең фонетик төҙөлөшө. Оҡшатыу һүҙҙәрен морфологик яҡтан төркөмләү: тамыр оҡшатыу һүҙҙәре, яһалма оҡшатыу һүҙҙәре һәм ҡушма оҡшатыу һүҙҙәре. Оҡшатыу һүҙҙәренең синтаксик функциялары. Уларҙың башҡа һүҙ төркөмдәренә мөнәсәбәте. |
| **3** | **Синтаксис простого предложения** | |
| 3.1 | Введение. Понятие синтаксиса. Основные единицы синтаксиса | Синтаксис фәне тураһында. Уның өйрәнеү объекты, маҡсаты, бурыстары. Синтаксис һәм логика. Һөйләм һәм фекерләү араһындағы мөнәсәбәт. Синтаксис фәнендә төрлә йүнәлештәр. Һөйләм тураһында төшөнсә. Синтагма. Синтагма тураһында дөйөм төшөнсә. Синтагма һәм һүҙбәйләнеш. Синтагманың һүҙбәйләнештәрҙән һәм һөйләм киҫәктәренән айырмаһы. Өндәш һүҙҙәр, инеш һүҙҙәр, һүҙбәйләнештәр һәм һөйләмдәрҙе синтагмаларға бүлеү, |

| | | |
|---|---|---|
| | | интонацияның роле. Синтагма, һөйләм такты, ритмик төркөмдәр. |
| 3.2 | Словосочетание и предложение | Һүҙбәйләнеш. Һүҙбәйләнештәрҙең һүҙҙән һәм һөйләмдән айырмаһы, уларҙың төҙөлөшө, яһалыу үҙенсәлектәре. Һүҙбәйләнештәрҙә һүҙҙәр араһындағы мәғәнә мөнәсәбәте.<br>Һүҙбәйләнештәрҙе эйәртеүсе һәм эйәреүсе киҫәге ҡайһы һүҙ төркөмөнән булыуға ҡарап төркөмләү:<br>исем һүҙбәйләнеш йәки субстантив һүҙбәйләнеш (эйәртеүсе һүҙе исемдән килә); эйәреүсе һүҙенә ҡарап төрҙәре: исемле исем һүҙбәйләнеш, сифатлы исем һүҙбәйләнеш, рәүешле исем һүҙбәйләнеш, һанлы исем һүҙбәйләнеш, ҡылымлы исем һүҙбәйләнеш һ.б.;<br>сифат һүҙбәйләнеш йәки адъектив һүҙбәйләнеш (эйәртеүсе һүҙе сифаттан килә); эйәреүсе һүҙенә ҡарап төрҙәре: исемле сифат һүҙбәйләнеш, рәүешле сифат һүҙбәйләнеш, ҡылымлы сифат һүҙбәйләнеш һ.б.;<br>һан һүҙбәйләнеш йәки нумератив һүҙбәйләнеш (эйәртеүсе һүҙе һандан килә); эйәреүсе һүҙенә ҡарап төрҙәре;<br>алмаш һүҙбәйләнеш йәки прономиналь һүҙбәйләнеш (эйәртеүсе һүҙе алмаштан килә); эйәреүсе һүҙенә ҡарап төрҙәре;<br>ҡылым һүҙбәйләнеш йәки вербаль һүҙбәйләнеш (эйәртеүсе һүҙе ҡылымдан килә); эйәреүсе һүҙенә ҡарап төрҙәре: исемле ҡылым һүҙбәйләнеш, сифатлы ҡылым һүҙбәйләнеш, рәүешле ҡылым һүҙбәйләнеш, ҡылымлы ҡылым һүҙбәйләнеш, һанлы ҡылым һүҙбәйләнеш һ.б.;<br>рәүеш һүҙбәйләнеш йәки адвербаль һүҙбәйләнеш (эйәртеүсе һүҙе рәүештән килә); эйәреүсе һүҙенә ҡарап төрҙәре;<br>модаль һүҙбәйләнеш.<br>Һүҙбәйләнеш һәм һөйләмдәр составындағы синтаксик берәмектәрҙең паратаксис һәм гипотаксис бәйләнеше. Һүҙбәйләнештәрҙә синтаксик бәйләнештең юлдары һәм саралары: ярашыу, башҡарылыу, йәнәшәлек, һөйкәлеү. Һүҙбәйләнеш составындағы һүҙҙәрҙең бәйләнеү юлдарының синтетик, аналитик, аналитик-синтетик төрҙәргә бүленеүе.<br>Һүҙбәйләнештәрҙең семантик төркөмдәре. Һүҙбәйләнештәрҙе төҙөлөшө буйынса |

| | | |
|---|---|---|
| | | төркөмләү: ябай һәм ҡушма һүҙбәйләнештәр. Һүҙбәйләнештәрҙең яһалыу юлдары.<br>Ирекле һүҙбәйләнештәр һәм фразеологик һүҙбәйләнештәр. Һүҙбәйләнештәрҙең яһалыу юлдары.<br>Һүҙбәйләнештәрҙе һөйләмдән айырып алыу һәм анализлау тәртибе. |
| 3.3 | Основные признаки предложения | Һөйләм. Һөйләмдең төп билдәләре: предикативлыҡ, модаллек һәм интонация, уларҙың белдерелеүе. Һөйләмдең төп бeрәмектәре.<br>Һөйләмдең интонацион һәм грамматик билдәләре, һөйләмдең һүҙбәйләнештән айырмаһы.<br>Һөйләмдәр һәм уларҙың парадигмаһы.<br>Һөйләмдәге синтаксик бәйләнештең төрҙәре: ярашыулыҡ, йәнәш килеүсәнлек, теҙмә, өҫтәлмә. |
| 3.4 | Функционально-коммуникативные и эмоциональные типы предложений | Ябай һөйләм төрҙәре. Ысынбарлыҡҡа мөнәсәбәт күҙлегенән раҫлаусы һәм инҡар итеүсе һөйләмдәр. Һөйләмдең коммуникатив төрҙәре (әйтелеү маҡсатына ҡарап йәки интонация яғынан һөйләмдәрҙең бүленеше): хәбәр, һорау, бойороҡ-өндәү, тойғо һөйләмдәр. Ябай хәбәр һөйләмдә һүҙ тәртибе, һүҙ тәртибенең функциялары. Һорау һәм тойғо һөйләмдең интонацион үҙенсәлектәре. |
| 3.5 | Главные  члены предложения | Эйәнең төп мәғәнәләре. Эйәнең морфологик бирелеше һәм уның төрҙәре. Эйә менән хәбәр араһында ярашыу мәсьәләһе. Ябай эйә һәм ҡушма эйә. Эйә менән хәбәр араһында тыныш билдәһе.<br>Хәбәрҙең морфологик бирелеше һәм структур төрҙәре. Фразеологик һүҙбәйләнештәр менән белдерелгән хәбәрҙәр. Ҡылым һөйкәлештәре менән белдерелгән хәбәрҙәр. Ҡатмарландырылған ҡылым хәбәрҙәр. Теҙмә ҡылым хәбәрҙәр. Ҡушма ҡылым хәбәрҙәр. Исем хәбәрҙәр һәм уларҙың структур-семантик төрҙәре: ябай, теҙмә һәм ҡушма исем хәбәрҙәр. Эйә менән хәбәр араһында һыҙыҡ. |
| 3.6 | Односоставные предложения | Бер составлы һөйләмдәрҙең баш киҫәге тураһында дөйөм төшөнсә. Баш киҫәге хәбәрҙән торған бер составлы һөйләмдәр (билдәле эйәле һөйләм, билдәһеҙ эйәле һөйләм, дөйөм эйәле һөйләм, эйәһеҙ һөйләм, |

| | | |
|---|---|---|
| | | инфинитив-модаль һөйләм).<br>Баш киҫәге эйәнән торған бер составлы һөйләм (атама һөйләм), уның грамматик үҙенсәлектәре. Атама һөйләмдәрҙең хәл-ваҡиға булыу урынын, үтәлеү ваҡытын, дөйөм фонын һүрәтләү өсөн ҡулланылыуы. Уларҙың күркәм әҫәрҙәрҙә сағылышы. |
